**Һәләтле балалар менән эшләү буйынса эш программаһы**

## 1. Аңлатма яҙыу

Кешелек донъяһы XXI быуатҡа аяҡ баҫты. Хәҙерге заман мәктәбе үҙенең үҫешендә ҡатмарлы осор кисерә. Заман талабы - баланың тәбиғәт тарафынан бирелгән һәләтен үҫтереп, уны ижади, төрлө телдәге фәнни сығанаҡтарҙан мәғлүмәттәр туплап, үҙ ҡарашын аңлатып бирә алырлыҡ киләсәк кешеһен тәрбиәләү. Һәләтле балаларҙы асыҡлау - беҙҙең киләсәктең үҫешенә бәйле. Сөнки талантҡа эйә уҡыусылар фәнде, иҡтисадты, сәнғәтте алға алып барыусы кешеләр буласаҡ. Донъяның киләсәге - ошо балалар ҡулында. Ошоға бәйле, һәләтле балаларҙы асыҡлау, уларҙы үҫтереү, уларға ярҙам итеү проблемаһы актуаль. Дәүләт кимәлендә маҡсатлы программа сиктәрендә “Рәсәй балалары” һәм “Һәләтле балалар” тигән программалар ҡабул ителеүе лә был проблеманың мөһимлеген күрһәтә.

Балаларҙың һәләтен асыу - ҡатмарлы һәм оҙайлы процесс. Мәсьәләнең мөһимлеге был эште комплекслы башҡарыуҙы, һәләтле балалар менән системалы рәүештә эш алып барыуҙы талап итә. Һәләтле балалар менән эштә яңынан-яңы алымдар, эш төрҙәре эҙләү бурысы тора белем биреү ойошмалары иңендә.

## 2. Норматив-хоҡуки база

- Балалар хоҡуҡтары тураһында Конвенция (20.11.1989).
- «Рәсәй балалары» Президент Программаһы (03.10.2002).
- «Һәләтле балалар» маҡсатлы Федераль программаһы.
- Рәсәй Федерацияһының 2012 йылдың 29 декабренән N273-ФЗ “Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында” Федераль законы.
- Башҡортостан Республикаһының 2013 йылдың 1 июленән №696-з “Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында” Законы.

## 3. “Һәләтле балалар менән эш” программаһының маҡсаттары һәм бурыстары

Маҡсаттар:

- башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән һәләтле уҡыусыларҙы табыу, улар менән эшләү, уларҙың һәләтен үҫтереү өсөн уңайлы психологик-педагогогик шарттар булдырыу, һәләтле уҡыусылар менән эште системалаштырыу.

Бурыстар:

- Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса һәләтле балаларҙы асыҡлау.
- Уҡыусының тыумыштан булған һәләтенә үҫергә ярҙам итеү, мөмкинлектәр тыуҙырыу.
- Күп һанлы методика һәм алымдар араһынан үҙ аллы фекерләүгә, ижади эшмәкәрлеккә килтерә торғандарын һайлап алыу.
- Контроль һәм мониторинг булдырыу.

- Һәләтле балаларҙы стимуллаштырыу юлдарын билдәләү.
- “Һәләтле балалар менән эш” программаһын төҙөү.
- Психологик-педагогик компетентлылыҡты үҫтереү.

## 4. Программаны тормошҡа ашырыу

**Әҙерлек-диагностика этабы:**

- ✓ диагностика методикаларын өйрәнеү;
- ✓ интеллектуаль һәләттәрҙе асыҡлау буйынса диагностика тестары банкын булдырыу;
- ✓ анкета үткәреп, уҡыусыларҙың ҡыҙыҡһыныуҙарын билдәләү;
- ✓ уҡыусыларҙың дәрестәге эшен өйрәнеү;
- ✓ һәләтле балалар менән эшләү өсөн үҫтереүсе ҡулланма материалдар туплау.

**Практик этап:**

- ✓ һәләтле балалар менән индивидуаль һәм төркөмдә эшләү өсөн педагогик технологиялар индереү;
- ✓ һәләтле балалар менән маҡсатҡа ярашлы эшләү, интеллектуаль, ижади саралар, конференциялар үткәреү;
- ✓ “Һәләтле балалар” исемлеген, методик материалдарҙы, диагностика тестарын тулыландырыу һәм яңыртыу;
- ✓ һәләтле балаларға педагогик, психологик ярҙам;
- ✓ тәжрибә менән уртаҡлашыу;
- ✓ һәләтле балалар буйынса методик ҡумта булдырыу.

**Контроль-анализ этабы:**

- ✓ программа һөҙөмтәләрен анализлау;
- ✓ уҡыусыларҙың ижади һәм эҙләнеү-тикшеренеү эштәренең йыйынтығын сығарыу;
- ✓ уҡыусыларҙың уңыштары мониторингын эшләү;
- ✓ программаны тормошҡа ашырыу барышындағы проблемаларҙы, уларҙы хәл итеү юлдарын билдәләү;
- ✓ һәләтле балалар менән перспектив эш планын төҙөү;
- ✓ һәләтле балалар менән эшләү буйынса матбуғат биттәрендә мәҡәләләр яҙыу;
- ✓ һәләтле балалар менән эште мәктәп сайтында, шәхси сайттарҙа урынлаштырыу.

## 5. Һәләтле балалар менән эш төрҙәре

- Стандарт булмаған дәрестәр үткәреү, һәләтле уҡыусылар менән дәрестә индивидуаль эшләү;
- Һәләтле балалар менән өҫтәлмә эштәр: предмет олимпиадаларына, төрлө конкурстарға әҙерләнеү;
- Предмет олимпиадаларында, төрлө кимәлдәге конкурстарҙа, конференцияларҙа ҡатнашыу;
- Психологик тренингылар, тестар үткәреү;

- Уҡыусыларҙы предмет буйынса тыңәрәккә, дәрестән тыш эшмәкәрлеккә йөрөтөү;
- Предмет буйынса интеллектуаль уйындар, конкурстар үткәреү;
- Һәләтле уҡыусыларҙың портфолиоһын булдырыу;
- Уҡыусыларҙы төрлө сараларҙы ойоштороуға, проект эштәренә йәлеп итеү.

**6. Көтөлгән һөҙөмтәләр**

- Интеллектуаль һәм ижади һәләттәре асыҡ күренгән һәләтле балаларҙың һаны артыу;
- Төрлө кимәлдәге конкурстар, олимпиадалар, конференцияларҙа ҡатнашыусылар һәм яҡшы уңыштар яулаусылар һаны артыуы;
- Уҡыусыларҙың белем сифаты күтәрелеүе;
- Һәләтле уҡыусылар буйынса мәғлүмәттәр тупланыуы;
- Һәләтлелекте асыҡлау буйынса диагностик материалдар тупланыуы;
- Һәләтле балалар менән эштә система барлыҡҡа килеү.

**7. Әҙәбиәт**


1. Вьюжек Т.Логические тесты, игры и упражнения. – М.: Изд-во ЭКСМО-Пресс, 2001.
2. Психология одаренности детей и подростков / Под ред. Н.С Лейтеса. – М., 2000.
3. Тапаҡов Х. Балаларҙың ижади һәләттәрен үҫтереү. // Башҡортостан уҡытыусыһы. №8, 2007.
4. Шарапов Ә.И. Әҙәбиәт уҡытыуҙа балаларҙың ижади һәләттәрен үҫтереү. – Өфө: «Китап”,1995.


**2020 -2025 йй.**
**“Һәләтле балалар менән эшләү” программаһын тормошҡа ашырыу планы**

| № | Саралар | Үтәлеү ваҡыты |
|---|---|---|
| 1. | Һәләтле балалар менән диагностика үткәреү | Уҡыу йылы башында |
| 2. | Һәләтле балалар менән йыллыҡ эш планы төҙөү | Уҡыу йылы башында |
| 3. | Һәләтле балалар менән индивидуаль эш планы төҙөү | Уҡыу йылы башында |
| 4. | Һәләтле балалар менән эшләү | Һәр ваҡыт |
| 5. | Эш алымдарын, төрҙәрен, методтарын практикаға | Һәр ваҡыт |

| | | |
|---|---|---|
| | индереү | |
| 6. | Һәләтле балалар менән эш һөҙөмтәләрен барлау (мониторнинг) | Уҡыу йылы аҙағында |
| 7. | Мәктәп олимпиадаһы үткәреү | Йыл һайын |
| 8. | Район олимпиадаларында ҡатнашыу | Йыл һайын |
| 9. | Программаның үтәлешенә анализ | Уҡыу йылы аҙағында |
| 10. | Һәләтле балалар менән эш буйынса методик ҡулланмалар, әҙәбиәт туплау | Һәр ваҡыт |
| 11. | Һәләтле балалар менән эш буйынса отчет | Уҡыу йылы аҙағында |